***Рәүф ШӘЬИЕВ,***
***филология фәндәре кандидаты***

# Профессор уҡыусымдың уңыштары



*Гөлфирә Гәрәева*

XX быуаттың туҡһанынсы йылдарында Гөлфирә Гәрәеваның исеме әҙәбиәт ғилеме өлкәһендә һәм әҙәби тәнҡиттә арыу уҡ баҙыҡланғайны инде. Авторҙың республика гәзит-журналдарында донъя күргән, башҡорт прозаһына арналған мәҡәләләрендә, рецензияларында фекер йүгереклеген, нәфис әҫәр үҙенсәлектәрен нескә тойоу-һиҙемләүен, әҫәрҙәрҙәге етешһеҙлектәрҙе ҡыйыу, йөҙ йәшермәй әйтеп-күрһәтеп биреүен уҡып шатланғайныҡ. Тура ярып әйтеүе, әҙәбиәттең юғары художестволылығын хәстәрләп ғәҙел баһа биреүе, урынлы, нигеҙле һәм объектив тәнҡитләүе йәш тәнҡитсегә ҡиммәткә төшкәнен дә һиҙә инек. Әйтергә теләгәнеңде әйтмәй ҡалыу, ҡыҫымды йөрәк аша үткәреү, әлбиттә, тәнҡитсе өсөн ҡәләмеңде күрәләтә үтмәҫләүгә тиң. Йәш ғалимә лә байтаҡ йылдар матбуғатта күренмәй торҙо. Афарин, тик ятмаған Гөлфирә, фән өлкәһендә йөҙөп эшләгән, ғилми-теоретик базаһы ныҡлы, киң эрудициялы, өлгөрөп еткән белгес булараҡ үҙен әҙәбиәт донъяһында ҡайтанан танытты. Һуңғы йылдар арауығында Германияның халыҡ-ара нәшриәтендә, сит илдәр матбуғатында, Рәсәй һәм республиканың ваҡытлы матбуғатында, “Ҡитап”, “Ғилем”, БДУ нәшриәттәрендә баҫылған тиҫтәләгән хеҙмәттәре, ВАҠ (Юғары Аттестация Ҡомиссияһы) исемлегенә ингән престижлы журналдарҙа баҫылған ике тиҫтә теоретик мәҡәләләре уны башҡорт әҙәбиәте фәнен үҫтереүҙә ең һыҙғанып, әүҙем, емешле эшләүсе ғалимдар сафына баҫтырҙы.

...Оло диңгеҙгә сыҡҡан был яҙмыштың инеш башы алыҫ Учалы яҡтарына барып тоташа. Илтабан ауылында тыуып, Ҡунаҡбай урта мәктәбен тамамлағас, Гөлфирә Гәрәева БДУ-ның башҡорт-рус бүлегенә уҡырға инә, тырыш студентка артабан уҡыуын аспирантурала дауам итә. Гөлфирә Ниғәмәтйән ҡыҙы бөгөнгө көндә Башҡорт дәүләт университеты профессоры, филология фәндәре докторы, Рәсәйҙең Тәбиғәт белемдәре Академияһы (РАЕ) ағза-корреспонденты, БР-ҙың атҡаҙанған мәғариф хеҙмәткәре. Рәсәй Федерацияһы Мәғариф һәм фән министрлығының Маҡтау грамотаһы менән бүләкләнгән. БР Фәндәр академияһының гуманитар бүлеге ғилми советы ағзаһы, БР ФА әҙәбиәт ғилеме һәм сәнғәт буйынса ғилми советы ағзаһы, БР ФА ғилми тикшеренеүҙәр буйын-

са эксперт комиссияһы ағзаһы. Факультеттың уҡыу-уҡытыу буйынса методик комиссияһы председателе, факультет советы ағзаһы. Ул 1990 йылда академик Ғайса Батыргәрәй улы Хөсәйенов етәкселегендә “Хәҙерге башҡорт прозаһында психологизм” темаһына кандидатлыҡ диссертацияһы, 2010 йылда филология фәндәре докторы, профессор, БР Фәндәр Академияһының ағза-корреспонденты Ғиниәтулла Сафиулла улы Ҡунафин етәкселегендә “Егерменсе быуаттың икенсе яртыһындағы башҡорт прозаһының үҫеш үҙенсәлектәре” тигән темаға докторлыҡ диссертацияһы яҡлай.

Байтаҡ йылдар Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында ғилми хеҙмәткәр йөгөн тарта, һуңғараҡ БДПИ-ла (хәҙерге БДПУ) уҡыта. 1995 йылдан алып БДУ-ла эшләй. Педагог-ғалимәнең ошо йылдарҙа бихисап тәнҡит мәҡәләләре донъя күрҙе. Вуз өсөн уҡыу ҡулланмалары, дәреслектәр төҙөүҙә әүҙем ҡатнашыуҙан тыш, “Хәҙерге прозала оҫталыҡ мәсьәләләре” (БДУ, 1996), “Заман көҙгөһө: геройҙың рухи донъяһы” (БДУ, 2003), “Тормош дөрөҫлөгө һәм әҙәби оҫталыҡ мәсьәләләре” (“Ғилем”, 2005), “Һуғыш һалған һағыш: Талха Ғиниәтуллин ижады” (“Ғилем”, 2006), “Хәҙерге башҡорт прозаһында герой концепцияһы” (“Ғилем”, 2007, Ә.Муллағолова менән авторҙаш), “Хәҙерге башҡорт прозаһы үҙенсәлектәре” (“Китап”, 2009), “XX быуаттың икенсе яртыһындағы башҡорт прозаһының үҫеш үҙенсәлектәре” (БДУ, 2010), “Башҡорт прозаиктары” (БДУ, 2012), “Психологизм в башкирской прозе 1960—1980-х годов” (БГУ, 2012), “Башҡорт прозаһында оҫталыҡ мәсьәләләре” (“Ғилем”, 2015), “Башҡорт әҙәбиәтендә ысынбарлыҡты художестволы сағылдырыу принциптары һәм заман геройы: XX быуаттың I яртыһы” (БДУ, 2015) монографияларын ташҡа баҫтырҙы.

Алты томлыҡ фундаменталь “Башҡорт әҙәбиәте тарихы”ның, юғары уҡыу йорттары өсөн “Егерменсе быуат башҡорт әҙәбиәте” дәреслегенең (БДУ, 2003), “Яңырыу юлында” тәнҡит мәҡәләләре китабының (“Китап”, 1995), рус-инглиз телдәрендәге “Писатели земли башкирской” (“Китап”, 2006) био-библиографик белешмәһенең авторҙашы булараҡ сығыш яһаны. Ғалимә “Волга буйы милли әҙәбиәттәре” (Барнаул, 2012) һәм “Хәҙерге башҡорт прозаһының художество үҙенсәлектәре” (Өфө, 2013) тигән коллектив монографияларҙы яҙыуға тос өлөш индерҙе.

Г.Н.Гәрәева Төркиәлә сығарылған “Төрки әҙәбиәттәр тарихы” тигән күп томлыҡҡа бүлектәр яҙыуҙа актив ҡатнашты. Уның тарафынан түбәндәге бүлектәр яҙылды: “1917—1930 йылдар башҡорт әҙәбиәте тарихы. Проза. Поэзия. Драматургия”, “1920—1930 йылдар әҙәби тәнҡит һәм әҙәбиәт ғилеме”. Ғалимә Д.Бүләков, Ә.Хәкимов, Ғ.Ибраһимов, А.Ғирфанов, Ф.Иҫәнғолов, Б.Рафиҡов, Ж.Кейекбаев, К.Мәргән, Н.Мусин ижадтары хаҡында аннотациялар, “Әҙәбиәт теорияһы” бүлегенә “Хикәйә. Нәҫер. Повесть. Жанр үҙенсәлектәре” тигән мәҡәлә яҙҙы.

Ғалимәнең күп һанлы хеҙмәттәренең бөтәһе хаҡында ла ентекле һүҙ алып барыу мөмкин түгел. Шуға ла тик берәүһе хаҡында ғына тулыраҡ туҡталып үтеүҙе урынлы күрҙек. “Хәҙерге башҡорт прозаһы” (“Китап”, 2009) монографияһында автор һикһәненсе йылдар башында башҡорт прозаһында ысынбарлыҡты сағылдырыу принциптарының яйлап үҙгәрә барыуына нигеҙле анализ яһай, яҙыусыларҙың соцреализмдың тар ҡалыптарында ижад итеүҙән

аҡрынлап баш тартыуҙарын, яҡшының һәр ваҡыт яманды еңеүен һүрәтләүҙән арына башлауҙарын Н.Ғәйетбайҙың “Буран”, З.Әхмәтйәнованың “Ҡырау”, Н.Мусиндың “Төпкөлдән төшкән килен”, “Шайтан ҡуласаһы”, “Ҡеше һуҡмағы”, Б.Рафиҡовтың “Үр елдәре” повестары миҫалында эҙмә-эҙлекле бер процесс рәүешендә тикшерә. Ғалимә был әҫәрҙәрҙе ил үҫешен көрсөккә терәтеүсе зарарлы күренештәр, ижтимағи-социаль, иҡтисади, рухи-әхлаҡи өлкәләге кисектергеһеҙ хәл итеүҙе талап иткән киҫкен мәсьәләләрҙе яҡтыртҡан әҫәрҙәр тип билдәләй, был повестарҙағы конфликттың яңы сифат алыуын, финалда уның хәл ителмәй, асыҡ ҡалыуын билдәләй, ентекле анализға таянып, башҡорт прозаһына үтеп инеүсе яңы рухты, яңы йүнәлеште асыҡлай. Ғалимә Н.Ғәйетбайҙың “Буран” повесын һикһәненсе йылдарҙағы тәнҡит рухында яҙылған, иҫке ҡоролмаларҙы ремонтлау, эшселәр яҙмышын ҡайғыртыу, нормаль эш шарттары тыуҙырыу урынына, етәкселәрҙең арттырып план үтәү, карьераға үрләү артынан ҡыуыуҙары арҡаһында һәләкәтле аварияларҙа кешеләрҙең ғүмере өҙөлөүен фашлаған, боҙоҡ система тәртиптәрен кире ҡаҡҡан тәүге әҫәр тип билдәләй. “Торғонлоҡ осоронда хөкөм һөргән етәкселек ысулдары, уларҙың кешеләр күңелендәге инициативаны, эшлекле фекерҙәрҙе тышаулап тотоуы, кеше факторына төкөрөп ҡарау, түбәндән килгән тәнҡитте ишетергә теләмәү, үҙ эшенең ысын патриоттары булғандарҙы эҙәрлекләү һ.б. кире күренештәр, нисек бар — шулай, буямай-биҙәмәй һүрәтләп бирелә”, — тип баһалана был повесть. Н.Ғәйетбайҙың “Уҙыш” романында ла яҙыусының төп иғтибары торғонлоҡ йылдарында киң йәйелдерелгән социалистик пландарҙы арттырып үтәүҙәрҙең ниндәй ҡурҡыныс һөҙөмтәләргә, кире ҡайтарғыһыҙ юғалтыуҙарға килтереүен күрһәтеүгә йүнәлтелгән, тип һыҙыҡ өҫтөнә ала автор.

Г.Гәрәева Н.Мусиндың һикһәненсе йылдар уртаһына тиклем яҙылған әҫәрҙәрендә, ғәҙәттә, ыңғай һәм кире көстәрҙең көрәшендә позитив яҡ һәр саҡ өҫтөн сығыуын, ижтимағи, социаль конфликт, әхлаҡи-этик ҡаршылыҡтар бер бөтөн булып үрелеп килеүен, финалдың оло йөрәкле, юғары гражданлыҡ сифаттарына эйә намыҫлы геройҙарҙың еңеүе менән тамамланыуын, ә һикһәненсе йылдарҙың икенсе яртыһында инде ысынбарлыҡты сағылдырыуҙа яҙыусының ижад принциптарының ҡырҡа үҙгәреш кисереүен “Ике ир һәм ҡатын”, “Йыртҡыс тиреһе” повестары, “Һуңғы солоҡ” романы, тиҫтәләгән хикәйәләре миҫалында асып һала. Автор был әҫәрҙәрҙә тормош күренештәренең ҡаты тәнҡит куҙлегенән үткәрелеүен, торғонлоҡ һәм үҙгәртеп ҡороу осорондағы, бөгөнгө көндәге ҡырҡыу ижтимағи, социаль, рухи-әхлаҡи проблемаларҙың компромисһыҙ, шымартыуһыҙ һүрәтләнеүен, яҙыусы ижадында ҡырыҫ реалистик стилдең ысынбарлыҡты сағылдырыуҙа төп ижад принцибы булараҡ ныҡлы урын алыуын нигеҙле яҡтырта.

Хәҙерге башҡорт прозаһының идея-художество йүнәлештәренең, төп үҫеш тенденцияларының тағы ла береһе — кешенең тыуған еренә, уның байлыҡтарына, ғәзиз тәбиғәтенә мөнәсәбәтен замандың иң мөһим проблемаһы кимәленәсә күтәреп һүрәтләү менән бәйле, тип билдәләй тикшеренеүсе. Үҙ фекерен автор М.Бураҡаеваның “Шишмә”, “Йәнтөйәк”, Б.Рафиҡовтың “Тауҙарҙа ҡар иртә ята” повестары, Н.Мусиндың “Мәңгелек урман”, “Таң менән сыҡ юлдарға”, Д.Бүләковтың “Ҡилмешәк”, “Туҙҙырылған тамуҡ”, Р.Солтангәрәевтың “Беҙ йәшәгән ер” романдарына ентекле анализ яһау менән нығыта. Туҡһанынсы йылдар уртаһынан ижтимағи-социаль яңғырашҡа

эйә булған ваҡиғаларҙың, замана тыуҙырған сәйәси күренештәрҙең тағы ла киңерәк, тәрәнерәк сағылышын Г.Гәрәева Д.Бүләковтың “Ғүмер бер генә”, Х.Тапаҡовтың “Һайлау”, Э.Әғзәмиҙең “Ожмах мөйөшө”, Ә.Хәкимдең “Пандора ҡумтаһы”, “Йыһан ҡапҡаһы” романдарына һәм повестарына таянып тикшерә. Бер үк тормош материалының Д.Бүләков романдарында реалистик, романтик, лирик, публицистик стиль алымдарында сағылдырылыуын, Ә.Хәким повестарында реалистик һәм мистик, мифологик, символик, кинәйәле-шартлы һүрәтләү принциптарына таянып яҡтыртылыуын, Э.Әғзәми әҫәрендә иһә сатирик фашлау традицияларының уңышлы дауам иттерелеүен, заман материалына бәйле үҫтерелеүен асып бирә. Үткән осорҙар менән сағыштырып ҡарап, ғалимә әлеге әҫәрҙәрҙә ҡеүәтле үҫтерелгән конфликттың геройҙарҙың тормошҡа, үҙҙәре башҡарған хеҙмәткә, вазифаға ҡараштары төрлөлөгөнән килеп сыҡҡан ҡаршылыҡтарға ғына нигеҙләнмәүе, ә тотош ил күләмендәге, сәйәси-ижтимағи тормоштағы ҙур кәмселектәр, алға һөрөлгән зарарлы тенденциялар тарафынан тыуҙырылған конфликттарға нигеҙләнеүе хаҡында фекер төйнәй, илдең бөтөн тормош рәүеше һөҙөмтәһендә тыуған киҫкен, иҫ киткес мөһим ҡаршылыҡтарҙы сағылдырыуҙарын билдәләй, үҙгәртеп ҡороу ихтыяжын тыуҙырған ижтимағи-социаль күренештәрҙең кешеләр психологияһына, рухи донъяһына көслө тәьҫир яһауын беҙҙең әҙиптәрҙең ҡалҡыуыраҡ итеп һүрәтләргә ынтылыуҙарын һыҙыҡ өҫтөнә ала.

XXI быуатҡа аяҡ баҫҡанда кешеләрҙең тыуған еренә мөнәсәбәте замандың тағы ла бер ҡырҡыу проблемаһы — ер һатыу мәсьәләһе менән барып тоташыуы был ғилми хеҙмәттә Р.Солтангәрәевтың “Кешеләр” һәм Ә.Әминевтың “Ҡытайгород” повестары, Р.Ураҙғоловтың “Килмешәк” хикәйәһе һ.б. нигеҙендә тикшерелә. Был әҫәрҙәрҙә киң ҡулланылыш тапҡан ҡырыҫ реалистик стилдең, фашлау тонының, публицистик пафостың ироник, сатирик, фантасмагорик һүрәтләү алымдары менән ҡушылыуы ентекле анализлана. Ғалимә артабанғы йылдарҙа ла был мөһим, халыҡ яҙмышы менән туранан-тура бәйләнештәге проблеманың әҙәби әҫәрҙәрҙә сағылыш үҙенсәлектәрен күҙ уңынан ысҡындырмай. Мәҫәлән, ер һатыуға, тыуған төйәктәренән яҙыуға бәйле кешеләрҙең үҙ биләмәләрен ташлап китергә мәжбүр булыуы, ауылдарҙың һүнеүе, эшһеҙлек, эскеселек, егәрле, әүҙем крәҫтиәндәрҙең үҙ эшен асып ебәрергә матди яҡтан хәленән килмәүе кеүек ижтимағи-социаль проблемаларҙы күтәргән С.Шәриповтың “Зәңгәр катер” романы Гөлфирә Гәрәева тарафынан “Ер яҙмышы — халыҡ яҙмышы” тигән ҙур күләмле мәҡәләлә төрлө яҡлап тикшерелә.

Хәҙерге башҡорт прозаһының тағы ла бер идея-художество йүнәлешен асыҡлауға Г.Гәрәева айырым бер шәхес яҙмышына ҡағылышлы киҫкен рухи-әхлаҡи проблемаларҙы ижтимағи-социаль өлкәләге ҡырҡыу мәсьәләләргә бәйләп яҡтыртҡан әҫәрҙәрҙе — Р.Солтангәрәевтың “Туй көнөндә”, “Буржуйҙар”, “Буш ҡәбер”, “Күҙ”, “Аҙаҡ”, Т.Сәғитовтың “Сиң”, Б.Рафиҡовтың “Ҡар һыуы”, С.Яҡуповтың “Хәжәтхана бәләһе”, Ә.Әминевтың “Танкист”, Т.Ғиниәтуллиндың “Йонсоу көндәр” повестарын төплө анализлау аша килә. Автор йәш яҙыусыларҙың ғына түгел, ә Р.Солтангәрәев, Б.Рафиҡов, Д.Бүләков, Н.Мусин, Ш.Янбаев һымаҡ үҙ ижад манералары, стилдәре күптән инде ныҡлы билдәләнгән әҙиптәрҙең дә ысынбарлыҡты сағылдырыуҙа элекке принциптарҙан, алымдарҙан ситләшеүҙәрен, йәмғиәт һәм айырым бер конкрет шәхес, яҡын туған һәм сит-ят кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәр

ҡатмарлылығын публицистик ҡыйыулыҡ йәки фәлсәфәүи һәлмәклек менән сағылдырыуҙарын, ҡырыҫ реализм, әсе фашлау алымдарында герой күңелендәге төпкөл ятыуҙарҙы асып һалыуын, йәмғиәттең кеше характерына кире тәьҫирен күрһәтеүҙәрен нигеҙле итеп асып бирә.

Бөгөнгө көндөң иң киҫкен социаль бәләләренең береһенә әйләнгән эскелек, һуңғы йылдарҙа айырыуса киң таралған рухи ярлылыҡ, кешеләрҙә миһырбанлыҡ тойғоларының кәмеүе, битарафлыҡ, үҙеңдең ваҡ ҡына мәнфәғәттәрең хаҡына кеше яҙмышына ҡул һелтәү күренештәре компромисһыҙ фашланыуына бәйле булған башҡорт прозаһындағы тағы ла бер идея-художество йүнәлешен билдәләп, ғалимә был төр әҫәрҙәрҙә — Т.Ғиниәтуллиндың “Томан эсендәге яңғыҙ йорт”, “Зыярат ҡылыу”, “Яңы йөрәк”, “Һыуға батҡан кеше”, Л.Яҡшыбаеваның “Бер яртылыҡ бисә”, Н.Мусиндың “Һуңғы солоҡ”, Ә.Әминевтың “Усман ташы”, Р.Тойғондоң “Туҡталҡа” һ.б. — реалистик стилдең ирреалистик һүрәтләү принциптары, фантастик, мистик стилдәр менән аралашыуын, иронияға, кинәйәгә, символикаға, шартлылыҡҡа киң урын бирелеүен һыҙыҡ өҫтөнә ала, уның сәбәптәрен аңлата, ентекле анализ үткәрә.

Артабан ғалимә хәҙерге башҡорт прозаһында, атап әйткәндә, Д.Бүләковтың “Шәфәҡ миҙгеле”, “Ҡыйырсыҡ ай”, “Асыҡ ишек”, “Биҙәклеташтан килгән хат”, “Ҡыштың тәүге көнө”, Р.Солтангәрәевтың “Аҡ умырзая”, “Таш болан”, С.Шәриповтың “Айыу ҡоҙа”, “Имән бағана”, “Осраштыҡ кисә — айлы кистә”, А.Баһумановтың “Ниндәй көн был...”, Н.Игеҙйәнованың “Сәфәр”, “Йонсоу миҙгел”, “Сатраш” повестарында, С.Шәриповтың “Зәңгәр катер”, Р.Ҡамалдың “Сабыр йән”, “Вариҫ”, “Ағай-энеләр”, “Талаҡ” романдарында һ.б. әҫәрҙәрҙә ябай кешенең ябай тормошон эстетик үҙкиммәткә эйә булараҡ күтәрмәләп һүрәтләүҙең үҙе бер айырым ҡеүәтле идея-эстетик йүнәлеште барлыҡҡа килтереүен билдәләй.

Һуңғы бер нисә тиҫтә йылдарҙа ижад ителгән әҫәрҙәрҙә психологизмдың, субъективлыҡтың бик ныҡ көсәйеүе, аң ағышының ҡатмарлы этаптарын энә күҙәүенән үткәреп сағылдырыу, рефлексия, ассоциативлыҡ, образлылыҡтың көслө ағымды барлыҡҡа килтереүе хаҡындағы фекер-тикшеренеүҙәрен Гөлфирә Гәрәева Т.Ғиниәтуллиндың “Тыуған яҡҡа ҡайтыу”, “Контуженный”, М.Кәримдең “Оҙон-оҙаҡ бала саҡ”, “Ярлыҡау”, Р.Ҡамалдың “Түңгәк”, “Ят бауыр”, “Ҡасыу”, “Ҡәрһеҙ ир”, “Таня-Таңһылыу”, Т.Ғарипованың “Ай менән Ҡояш бер генә”, Р.Байымовтың “Яуап бирер көн”, “Алданыу”, Ф.Аҡбулатованың “Мин тынлыҡты тыңланым”, Г.Ғиззәтуллинаның “Күңел йорто”, “Күбәләккә әйләнеү”, “Һәҙиә” роман, повесть, хикәйәләре миҫалында ышандырғыс итеп раҫлай, ҡыҙыҡлы, өр-яңы тикшеренеүҙәр үткәрә. Шулай уҡ һуңғы тиҫтә йылдар прозаһында детективлыҡ, мажаралыҡтың көслө ағымды барлыҡҡа килтереүен автор Ғ.Хисамовтың “Аҡтамыр”, “Ун туғыҙынсы”, Р.Ҡамалдың “Оҙонтал”, Б.Рафиҡовтың “Ғәрәп”, Г.Яҡупованың “Йыртҡыс ҡаны”, Б.Ноғомановтың “Ҡар кешеһе”, Х.Һөйөндөковтың “Тау тотҡоно”, Ф.Латыпованың “Үлем аҫылташы” һ.б. роман, повестарын анализлауҙан сығып билдәләй. Шартлы-метафористик прозаның сағыу әҫәрҙәренә ғалимә Ә.Хәкимдең “Пандора ҡумтаһы”н, “Йыһан ҡапҡаһы”н, Р.Ҡамалдың “Иблис мөхәббәте”н, Ф.Аҡбулатованың “Һомайғош юлы”н, “Остаз менән Нәркәс”ен, “Таш ҡәлғә”һен, “Тәгәрмәсҡала йәки “ер кендеге”н, “Ҡорбанлыҡ, йәки ябай ғына алыш-биреш”ен, Ә.Үтәбайҙың “Һаҙағай”ын һ.б. индерә.

Монографияның “Сәсмә әҫәрҙәрҙең сюжет-композиция ҡоролошо” тигән икенсе бүлеге ысын мәғәнәһендә әҙәбиәт теорияһын “һыу кеүек эскән” ғалимә ҡәләмен тәкрарлай. Был бүлектә тулайым ҡабатлауҙарһыҙ, яңынан-яңы әҫәрҙәр миҫалында йөкмәтке һәм форма нисбәтен, әҫәрҙәрҙең структур ойошторолош үҙенсәлектәрен ентекле тикшереү маҡсаты ҡуйылған. Күренеүенсә, тикшереү объекты итеп йөҙәрләгән әҫәрҙәр алынған. Әҙәбиәт белгесенең үҙ-үҙенә талапсанлығы, киң эрудицияға, төплө белемгә эйә булыуы, һуңғы өс тиҫтәнән ашыу йыл дауамындағы ҡатмарлы әҙәби процестың эсенә инеп китеп, йөҙөп йөрөп тикшереүе, иҫ киткес күләмле материалды әҙәби әйләнешкә индереп ебәреүе, бер кемдең дә хеҙмәтендәге фекерҙәрҙе үҙләштермәйенсә, үҙ аллы анализ яһауы, фәнни яҡтан нигеҙле дөйөмләштереүҙәргә килеүе ихтирам уята.

Уҙған быуаттың 60—70-се йылдарында башҡорт әҙәбиәте ғилеме һәм әҙәби тәнҡите билдәле бейеклектәр яулағайны, сәскә атыу осорон кисергәйне. Әҙәби процесты етәкләүсе, әҙиптәрҙе талапсан тәнҡит һүҙе менән әйҙәп барыусы Марат Минһажетдинов, Ҡим Әхмәтйәнов, Әнүр Вахитовтар булыуы менән беҙ сикһеҙ ғорурлана инек. Ошо оло ғалимдарҙың хеҙмәттәрендә тәрбиәләнеп үҫкән, уларҙың традицияларын дауам иткән, төплө белемле, әҙәби процесҡа, конкрет яҙыусы ижадына, теге йә был әҫәргә үҙ фекере, үҙ аллы объектив баһаһы булған Гөлфирә Гәрәева кеүек белгестәр булғанда, иншалла, әҙәбиәт ғилеме һәм әҙәби тәнҡит бөгөн дә үҫештән туҡталмаҫ.

Гөлфирә Гәрәеваның “Хәҙерге проза үҙенсәлектәре” тигән монографияһы һуңғы тиҫтә йылдар башҡорт прозаһының яулаған ҡаҙаныштарын һәм етешһеҙлектәрен, яңы заманға ярашлы өр-яңы һыҙаттарға эйә булыуын, идея-художество йүнәлештәрен, төп үҫеш тенденцияларын, стиль өлкәһендәге ҡыҙыҡлы эҙләнеүҙәрен һәм табыштарын, конфликт тәбиғәтенең үҙгәреүен, идея-тематик, проблематик даирәһе киңәйеүен, ысынбарлыҡты биҙәмәй-шымартмай яҡтыртыуҙа ниндәй принциптарға таяныуын, сюжет-композиция ҡоролошо үҙенсәлектәрен, художестволы оҫталыҡҡа өлгәшеү серҙәрен тәрән тикшереүсе хеҙмәттәрҙең тәүгеһе икәнлегенә шигем юҡ. Утыҙ йыл дауамындағы бай әҙәби процесты ентекле һәм теүәл яҡтыртыу, уның концепцияһын төҙөү, төҙөк бер системаға һалыу, теоретик йәһәттән анализлау һәм синтезлау, дөйөмләштереү, ышандырғыс дәлилле һығымталар яһау күпме зиһен һәм ихтыяр көсө талап итеүен ғалимә үҙе генә беләлер. Ҙур көс түгелгән, уның ҡарауы, бына тигән хеҙмәт тыуған. Әҫәрҙәренә хаҡлы баһа бирелеүҙән хаҡһыҙ рәүештә мәхрүм ҡала килгән байтаҡ яҙыусылар өсөн дә, моғайын, был китаптың донъя күреүе һөйөнөслө ваҡиға булғандыр. Ғилми-теоретик пландағы хеҙмәттең киң ҡатлам уҡыусы ҡыҙыҡһынып уҡырлыҡ стилдә яҙылыуы ла ыңғай тойғо уята.

Ғөмүмән, ғалимәнең хеҙмәттәрен барлай башлаһаң, уларҙың иҫ киткес күплеге, тәрәнлеге, төрлө яҡлылығы хайран ҡалдыра. БДУ-ла һабаҡ бирергә лә, “Ағиҙел” журналында баҫылып торған иҫәпһеҙ-һанһыҙ өр-яңы әҙәби әҫәрҙәргә тәнҡит мәҡәләләре яҙырға ла, юғары уҡыу йорттары өсөн программалар төҙөргә лә, республика, бөтә Рәсәй, халыҡ-ара конференцияларҙа һәм симпозиумдарҙа ҡатнашырға ла, республика һәм илебеҙҙең үҙәк матбуғатында тәнҡит мәҡәләләрен баҫтырырға ла нисек өлгөрә икән, тип һоҡланаһың. Уның тәнҡит мәҡәләләренең ҡиммәте объективлығы, эшләнгән һығымталарының фәнни яҡтан нигеҙле булыуына бәйле, тикшереләсәк материалға ҡарата яңыса ҡараш булдырыуы менән айырылып тора.

Гөлфирә Ниғәмәтйәновна — күп ҡырлы, тынғыһыҙ эшмәкәр. Уның эшмәкәрлеге тик уҡытыу, фән менән генә сикләнеп ҡалмай. Ғалимә мәктәптәр менән тығыҙ бәйләнеш булдырған. 1999—2007 йылдарҙа ул Р.Ғарипов исемендәге 1-се һанлы республика гимназия-интернатында һәм Ғ.Әлмөхәмәтов исемендәге республика музыкаль гимназияһында башҡорт әҙәбиәтен тәрән өйрәнеү буйынса махсус курстар алып барҙы. 2000—2010 йылдарҙа БР Мәғариф министрлығы һәм Өфө ҡала мәғариф бүлеге тарафынан ойошторолған Бәләкәй Фәндәр Академияһы эргәһендәге "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте" секцияһын етәкләне, һәләтле уҡыусыларҙы фәнни эшкә әҙерләүгә ҙур өлөш индерҙе, гимназияларҙың сығарылыш уҡыусылары араһында профориентация эше алып барҙы. Гәрәева Г.Н. үҙе эшләгән башҡорт филологияһы һәм журналистика факультетын тамамлаусылар менән даими бәйләнеш тота, уларҙың педагогик эшмәкәрлегендә, мәктәп уҡыусыларының ғилми эҙләнеүҙәр эшен ойоштороуҙа, Өфө ҡалаһындағы мәктәптәрҙә фәнни-практик конференциялар үткәреүҙә ғилми-методик ярҙам күрһәтә.

Гөлфирә Ниғәмәтйән ҡыҙының элекке студенттары, хәҙер инде үҙҙәре тәжрибәле, хөрмәтле уҡытыусылар, яуаплы вазифалар башҡарған шәхестәр остаздарын ихтирам һәм яратыу менән телгә алалар, уҡытыусыларының "Әҙәбиәт" тигән ымһындырғыс, тылсымлы донъяға алып инеп, уның иң төпкөл серҙәрен асып һалыу өсөн бар тырышлығын, көсөн биреүен һыҙыҡ өҫтөнә алалар. «Үҙе ғәҙел, үҙе талапсан, ғәжәп күп белгән уҡытыусыбыҙҙың һәр әҙәби әҫәр өҫтөндә ентекле эшләүен, төплө анализлауын күреп һоҡлана, әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһен, һәр геройҙың исеменә тиклем яттан белеүенә хайран ҡалып та, аптырап та ҡарай инек. Үҙебеҙ ҙә уның кеүек булырға ынтылдыҡ", — тип йылы баһалайҙар.

Г.Гәрәева 1998—2003 йылдарҙа йәштәр һәм студенттарҙың Бөтә Рәсәй Демократик Союзы ойошторған "БР вуздарының иң яҡшы студент эштәре" республика конкурсының эксперт комиссияһы ағзаһы булды, "Йыл уҡытыусыһы" республика конкурстарының жюри составында эшләй. Профессиональ яҙыусыларҙың ҡулъяҙмаларын тикшереүҙә ҡатнаша, башлап яҙыусыларға ярҙам күрһәтә.

Г.Н.Гәрәева күп томлы "Башҡорт энциклопедияһы"на, "Мостай Кәрим" энциклопедияһына, "Башҡорттарҙың тарихы һәм мәҙәниәте" тигән ғилми-популяр коллектив баҫмаға мәҡәләләр яҙыуҙа, "Ҙур юридик һүҙлек"те башҡортсаға тәржемә итеүҙә актив ҡатнашты. Әлеге көндә ул "Башҡорт әҙәбиәте тарихы"ның 7-се томын яҙыуҙа ҡатнаша. 2011 йылдан алып "Китап" нәшриәтендә Г.Гәрәеваның "Башҡорт прозаһында метод һәм стиль мәсьәләләре" монографияһы ташҡа баҫылыуҙы көтөп ята.

Г.Гәрәеваның 2012 йылда "Башҡорт прозаһының төп идея-художество йүнәлештәре" тигән монографияһының Германияла, халыҡ-ара нәшриәттә ташҡа баҫылып сығыуы башҡорт әҙәбиәтен сит илдәрҙә пропагандалау эшенә тос өлөш булды. Күп һандағы мәҡәләләренең сит илдәр баҫмаларында: Англияла, Германияла, Польшала, Чехияла, Болгарияла, Словенияла, Ҡырғыҙстанда, Ҡаҙағстанда һ.б. донъя күреүе лә башҡорт әҙәбиәтен, башҡорт әҙиптәрен донъя кимәлендә танытыу эшенә хеҙмәт итә. Гөлфирә Ниғәмәтйән ҡыҙы Гәрәеваның башҡорт әҙәбиәтен үҫтереү һәм уны тотош илгә, киң донъяға алып сығыу өсөн түккән көсө оло ихтирамға лайыҡ.